*Кәҙим АРАЛБАЙ,*
*Салауат Юлаев исемендәге*
*дәүләт премияһы лауреаты*

# Абҙаҡтың аҙаҡҡы йыры түгелдер

**(Йомабай Иҫәнбаев эҙҙәрен юллап)**

Башҡортостанда Абҙаҡ ауылдары өсәү — Баймаҡ, Белорет һәм Учалы райондарында. Минең сәфәрем — Кесе Ҡыҙыл йылғаһы башында, Өфө—Сибай тимер юлы өҫтөндә ятҡан Абҙаҡҡа ине.

Иртән иртүк ”Өфө—Сибай” поезынан төшөүебеҙҙе ҡуйы томан көтөп торған. Тирә-йүндә бер ни абайларлыҡ түгел. Әммә биш минут та торманыҡ, поезды ҡаршы алыусы автобус томан ярып килеп тә сыҡты. Йылы вагондарҙан төшкән пассажирҙар, таңғы һалҡындан тиҙ ҡотолоуҙарына һөйөнөп, машинаға инә һалып ултырҙы.

Ун-ун биш минут үтеүгә, Абҙаҡҡа килеп тә еттек. Ауыл урамында өс-дүрт урында туҡтап, көтөп тороусыларҙы ултыртып алдылар. Машина хәҙер шул кешеләр менән станция яғына кире китә икән. Автобусҡа шығрым тулған ауыл кешеләре (кисәге крәҫтиән балалары!) производствоға — сәғәтле эшкә бара. Кем — станцияла, тимер юл эшендә, кем Магнитогорск ҡалаһының Абҙаҡ ерҙәрендә урынлашҡан ял йорттарында, профилакторийҙарында металлургтарҙың ялын ойоштороу хеҙмәтендә көн күрә.

Ә үҙ ауылдарында йүнле-башлы даими эш юҡ, тинеләр. Быға ҡапыл ғына ышанғы ла килмәй. Ниңә ышанмаҫҡа? Кем хәстәрләһен ауыл халҡы өсөн йыл әйләнәһенә етерлек эште? Сөнки көн дә тиерлек машина-машина, вагон-вагон Белорет ағасы (бынамын тигән төҙөлөш материалы!) ситкә китә. Еребеҙ байлығын, башҡорт урмандарын Мәскәүҙән тороп, үҙәктән ултырып бүләләр ҙә төрлө тарафтарға олаҡтыралар. Ниндәй хәлгә ҡалдыҡ? Ниңә әле үҙебеҙҙең төбәктәрҙә таҡта ярыу, ағас эшкәртеү цехтары асмаҫҡа? Шуларҙы үҙебеҙ һатмаҫҡа? Йорт, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары ла магазиндарыбыҙҙа тулып ятмай ҙа баһа. Ә күпме кеше өй һала алмай интегә! Арзан төҙөлөш материалы юҡ. Тотороҡло эш менән тәьмин иткәндә, Абҙаҡтың да ярты халҡы, татлы йоҡоларын бүлеп, ҡара таңдан тороп әллә ҡайҙа эшкә ашыҡмаҫ ине...

Абҙаҡ — боронғо башҡорт ауылдарының береһе. Тәбиғәте матур, ере бай. Мал өсөн — тауы, эсәйем тиһәң — һыуы, төҙөйөм тиһәң — ағас-ташы, өҙөп ҡабайым тиһәң — еләк-емеше, үлән-ашы етерлек ине. Быға тиклем. Хәҙер иһә ошо хозур тәбиғәт йылдан-йыл ҡыйратыла, тапала, әрәм-шәрәм ителә.

Бында күрше өлкәләрҙең профилакторийҙары һәм лагерҙары ишәйә бара, йәйен-ҡышын ҡалаларҙан килгән туристар, ял итеүселәр өҙөлмәй. Урмандар бысратыла, яндырыла, ҡырҡыла, сабынлыҡтар тапала. Абҙаҡ халҡына иһә йылдан-йыл тарсылыҡ килә бара, инде ул хатта үҙ еренә үҙе хужа була алмаç хәлгә ҡалды. Берәүҙәргә (үҙәккә) бында ҡырсынташ карьеры асыу кәрәк, ә икенселәргә (Магнитогорскиға) Кесе Ҡыҙылда һыуһаҡлағыс төҙөү хәжәт. Бәлки, икеһен дә һыйҙырыр Абҙаҡ ере, тик урындағы халыҡҡа ғына иркен йәшәр, рәхәтләнеп донъя көтөр төйәк, күркәм тәбиғәттән бер ниндәй ҙә йәм дә, тәм дә ҡалмаç...

***

Ошондай ҙа гүзәл, илаһи тәбиғәт ҡосағында тыуған йәки үçкән кеше нисек инде рәссам йәки йырсы булмаһын ти?! Мин быны юҡҡа ғына әйтмәйем, сөнки СССР-ҙың халыҡ рәссамы, Художество Академияһының ағза-корреспонденты Әхмәт Фәтҡулла улы Лотфуллиндың бала сағы ошо ауылда үткән. Абҙаҡ элегерәк Әбйәлил районына ҡарай ине. Ҡайһылай булғанда ла, мәшһүр рәссам менән ике район да хаҡлы ғорурлана.

Абҙаҡ — Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы, Башҡорт дәүләт филармонияһы йырсыһы Роза Аҡкучукованың тыуған ауылы. Уның моңло тауышында Урал тәбиғәтенең бөтә сабыр холҡо, наҙы һәм яғымлылығы сағыла...

***

Абҙаҡҡа мин Сәлих ағай Иçәнбаевты — исеме донъяға танылған мәшһүр ҡурайсы Йомабай Иçәнбаевтың улын — күрергә тип килгәйнем. Һуңлағанмын!.. Саҡ ҡына өлгөрә алманым — март аҙаҡтарында Сәлих ағай етмеш йәшендә был донъянан китеп барған.

Беҙ бер мәртәбә генә хатлаштыҡ. Атаһы Йомабай Иçәнбаев тураһында мәғлүмәттәр һорап яҙыуыма ул саҡырыу хаты ебәрҙе: "...Килеп яҙып алһағыҙ, һәйбәт булыр ине..." Сәлих ағайҙың ҡаты ауырыуы хаҡында ҡыҙы Гөлсөм хәбәр итте. Күпте кисергән фронтовик йөрәгенең оҙаҡ көтөргә түҙеме етмәгән...

Бына беҙ Сәлих ағайҙың йәмәғәте Гөлъямал апай менән ғаилә альбомын, хаттар, фотоһүрәттәрҙе, Сәлих ағайҙың документтарын ҡарап ултырабыҙ. Өйҙә беҙҙән башҡа күршеһенең хәлен белешергә ингән Сәйҙә инәй менән Миңзифа апай һәм мине был өйгә алып килгән Нәжиә апай Аҡкучукова бар. Улар алмашлап донъя хәлдәре, Сәлих ағай тураһында һөйләй, фотоларға, ҡағыҙҙарға аңлатма бирә.

Бына Гөлъямал апай миңә бер документ һона. Ул — Сәлих ағайҙың Бөйөк Ватан һуғышы ветераны булыуы хаҡында танытма.

*Удостоверение участника войны*
*Серия Б №130411*
*Исянбаев Салих Юмабаевич*
Перерегистрировано в *1987 г.* Военным комиссариатом *БАССР*
*Дата выдачи 5 марта 1982 г.*
*Майор Садретдинов.*

Сәлих ағай атаһынан ҡурайҙа уйнау һөнәрен мираҫ итмәгән. Әммә ул башҡорт халыҡ йырҙарын яратып тыңлаған, үҙе лә йырға әүәҫ булған.

— Боронғо көйҙәрҙе ярата ине, — ти Гөлъямал апай. — Бигерәк тә ”Мәҙинәкәй”, ”Аҡһаҡ ҡола” йырҙарын матур йырлай торғайны.

Бер уйлаһаң, ҡыҙыҡ инде: кешене ил буйлап нимә йөрөтә? Эсәһе һыу, ашайһы ризыҡмы? Ниңә кеше үҙенең тыуған ерендә генә йәшәмәй?.. Йомабай Иҫәнбаев Хәйбулла районының Үрге Смаҡ ауылында тыуған, аҙаҡ унан 4—5 саҡырымда ятҡан Түбәнге Смаҡта (Таналыҡ йылғаһы буйында) йәшәгән. Ә Сәлих ағай ниңә атай-олатайҙары ерендә түгел, ә Ҡыҙыл буйҙарына килеп, Абҙаҡты төйәк иткән? Ошо һорауҙарға яуап эҙләп, мин Гөлъямал апайҙың әкрен генә һөйләгәндәрен тыңлайым, ҡағыҙыма теркәп барам...

Сәлих ағай Абҙаҡҡа 1956 йылдың мартында килгән. Шул ваҡыттан бирле ошонда ғүмер иткән.

— Атаһы — Йомабай Иҫәнбаев тураһында кешегә һөйләп бармай торғайны, — тип хәтерләй Гөлъямал апай, — һирәк-һаяҡ ҡына иҫкә ала, унда ла әле йә мәжлестә ҡурай моңо яңғыраһа, йә гәзит-журналда яҙып сыҡһалар ғына.

— Шулай ҙа нимәләр һөйләй торғайны? — тип төпсөнәм.

— Атайым был яҡта, Ҡыҙыл һыуы буйында булып киткән, тине бер мәл. Теге сит илдә ҡурай тартып йөрөп ҡайтҡасмы икән, 1928 йылдар тирәһендә, тине Сәлих ағайың. Йомабай Иҫәнбаев Абҙаҡҡа килеп, ошо туғайҙарҙа ҡурайсылар менән тирмәлә ятып, йыйын йыйҙырып, йырҙар яҙҙырған, ти. Үҙе бик оҫта уйнағанға, бүтән ҡурайсыларҙы үҙенә эйәртеп уйнаған...

Ҡурай, йыр-моң тураһында һүҙ сыҡҡас, өйҙәге инәй-апайҙарҙың күҙҙәре емелдәшеп, күңелдәре елкенеп китте. ”Йырығыҙҙы ла яҙып алам”, тигән һүҙемде ишетеү менән Миңзифа апай Вәлиева, ҡыҫтатып тормай, йырлап та ебәрҙе:

*Ҡыркты ғына буйы, ай, биш кәкүк,*
*Сакыра ла Ҡыркты башында.*
*Мин үлермен, кәкүк, һин калырһың,*
*Сакырырһың кәберем ташында.*
*Уй аллакай ғына, уй хоҙайым,*
*Инде ниҙәр уйҙап карайым,*
*Инде ниҙәр уйҙап караһам да,*
*Бәхет бирмәҫ инде хоҙайым...*

Боронғо башҡорт йырҙары. Уларҙа тыуған төйәк, ер-һыу, донъяның фанилығы, кешенең аяуһыҙ яҙмышҡа мөнәсәбәте сағыла. Йырҙарҙа халыҡтың тормошҡа ҡарашы, эске донъяһы ярылып ята. Кеше унда нисек кенә өмөтһөҙлөккә бирелгән, көсһөҙ һымаҡ күренһә лә, асылда илтифат, әҙәп, иман, йомшаҡ бәғерлелек кеүек сифаттар аша унының күңел бөйөклөгө төҫмөрләнә.

Был ауыл әбейҙәре араһында иң олоһо Сәйҙә инәй Ғүмәрова булып сыҡты (1911 йылғы). Уның да йыр һандығы бик байға оҡшай, әммә һаулығы ҡаҡшағанлыҡтан һәм тулҡынланыуҙан ул йомшарып китте. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, барыбер бер нисә йыр яҙҙырҙы.

*Урал ғына буйы бигерәк йәмле,*
*Ак тирмәләр короп йәйләргә.*
*Йәшлек дәүерҙәрем үтеп үк китте,*
*Инде лә калды һағынып һөйләргә,*
*Һауаларҙан килә, ай, ике кош,*
*Кәйелеп-кәйелеп китә ем тапмай,*
*Бер ике лә көйҙө көйҙәмәһәм,*
*Янған йөрәккәйем ял тапмай.*

Сәйҙә инәйҙең күңеле тулы һағыш икән шул: уның Фәйрүз тигән улы фажиғәле рәүештә һәләк булған. Улына арнап бәйет сығарған, Сәйҙә инәй ул бәйетте илай-илай әйтеп ишеттерҙе:

*Ишеккәйем алды, ай, бағана,*
*Инһәм-сыкһам да шуға таянам.*
*Йоколарымда күреп, ай, уянам,*
*Төштәремдә күреп йыуанам.*

Шулай инде, кемде генә иҫләмә, ҡайһы ғына ғаиләне алма, һәр кемдең үҙ ҡайғыһы. Бер кемде лә яҡыныңды юғалтыу урап үтмәй. Утыҙ биш йыл бергә ғүмер иткән тормош иптәшенән тороп ҡалған Гөлъямал апай ҙа күңелендә ташҡан ҡайғыны йыр-моң менән бушата.

*Кәкүккәй ҙә кошто мин таныйым*
*Ҡанаттарын кағып осканда.*
*Йырҙағым да килеп йырҙамайым,*
*Мин йырлайым эсем бошканда.*
*Минең тауыштарым таштар яра,*
*Тик һандуғас түгел һайрарға.*
*Яна ла ғына йөрәгем, ут та ялкын,*
*Тик самауыр түгел кайнарға.*
*Ҡыркты ғына буйы кырк биш кәкүк,*
*Таң атыукайҙарын белгертә,*
*Ир һынайым тиһәң, сакырып һыйҙа,*
*Кем икәнен үҙе белгертә.*

*Ҡыҙыл ғына һыуы тәрән, тиҙәр,*
*Иң тәрәнкәйҙәре билемдән,*
*Билендәп тә оскан аҡҡош кеүек*
*Биҙеп киттең тыуған илеңдән...*

—Мин ошо йырҙарҙы йырлаһам, Сәлих ағайың илай торғайны, — тип һөйләп ала Гөлъямал апай. Иларһың да. Йыры ниндәй бит әле! Ошонан һуң халыҡты шағир түгел тип ҡара! Ниндәй образдар, ниндәйен фекер тәрәнлеге был йырҙарҙа! Иҫең дә китмәле...

Гөлъямал Зиннур ҡыҙы Мәғәсүмова (1923 йылғы) Сәлих ағай менән икәүләп өс ул, бер ҡыҙ тәрбиәләп үҫтергән. Улдары Мирза менән Миҙхәт Магнитогорск ҡалаһында йәшәй, Әхәт менән Гөлсөм — ауылда. Сәлих ағай тураһында һөйләгәндә Гөлъямал апайҙың күҙҙәренән яҡтылыҡ бөркөлә, ул уны бары тик оло ихтирам менән телгә ала. Уларҙың ҡатмарлы ла, ауыр ҙа, әммә йырлы ғүмер йәшәгәнлектәренә ышанаһың.

Ә йырҙары күп Гөлъямал апайҙың, көнө-төнө яҙҙырыуы ла ихтимал уның, әгәр кәйефе килһә, йәки донъя мәшәҡәттәре ашыҡтырып тормаһа.

*Егет булһаң ғына, әй, дәртле бул,*
*Дәртле иргә мәүләм мал бирә.*
*Дәртле лә генә иргә, әй, мал бирә,*
*Килмәм тигән килеп хәл белә...*

Быныһын Гөлъямал апай миңә арнап йырланы шикелле. Хикмәт йырҙың һүҙҙәрендә генә түгел, ә уның үтә лә йылы итеп, ихтирамға төрөп башҡарыуында ла булды.

*Күк күгәрсендәрҙең, ай, ояһы*
*Булыр йәшел генә быяла.*
*Күк күгәрсен кеүек, ай, гөрҙәшеп,*
*Шат йәшәйек фани донъяла.*
*Урал ғына буйы матур ҙа ул,*
*Гөл сәскәһе сәскә атмай бит.*
*Кисәге лә көндәр, ай, бөгөн юҡ,*
*Һағынһаң да кире ҡайтмай бит...*

***

Йомабай Иҫәнбаев эҙҙәре буйлап йөрөгәнемдә, Уралтау һыртын аша артылғанымда, Абҙаҡҡа килеп тә, был тиклем дә моңло күңелдәр солғанышында ҡалырмын, иҫ киткес аһәңле халыҡ йырҙары яҙып алырмын тигән уйҙы башыма ла килтермәгәйнем. Бына ҡайҙа икән ул халҡыбыҙҙың рухи хазинаһының ҡоромаҫ та, һайыҡмаҫ та шишмәләре! Ҡайҙан ала улар илһам-дәртте, көс-ғәйрәтте — элеккеге быуындарҙың күңел байлығынанмы, халҡыбыҙҙың борондан килгән тәбиғи йәшәү асылы-

нанмы? Әллә был йырҙың һуңғы үрһәләнеүеме — *фажиғәле бөгөнгөнөң һәләкәт килтереүен тойоп, кеше күңеле шәмдәренең ялкын телендәй талпыныуымы?!*

Мин был йырҙарҙың ҡасан — борон-борон замандарҙамы, йә булмаһа бөгөн генәме — сығарылғанын төпсөмәнем. Улар үҙҙәре тураһында үҙҙәре үк һөйләп тора. Әммә бер нәмә яҡшы билдәле: бары тик йырлы төбәктә генә йырсылар тыуа, йырлы күңелле кешеләр йәшәй. Шуларҙың береһе — данлы ҡурайсы Сәлих Йомабай улы Иҫәнбаев булған. Шуларҙың бөгөнгөләре — Сәйҙә апай Ғүмәрова, Гөлъямал апай Мәғәсүмова, Миңзифа апай Вәлиева, Нәжиә апай Аҡкучукова... Уларҙың береһенең дә ғүмер юлы еңелдән булмаған. Бөтәһе лә һуғыш йылдары ауырлығын йәндәрендә лә, иңдәрендә лә татыған, аслығын да, яланғаслығын да кисергән...

Нәжиә апай менән әкрен генә Абҙаҡ урамынан атлайбыҙ. Ауылда тынлыҡ, ә күңелдә — йыр сыңлай. Йыр әсирлегенән айырылып, ысынбарлыҡҡа ҡайтырға теләп, алыҫҡа — урман ҡаплаған тау теҙмәләренә ҡарайым. Ауылдың көнсығышында әллә ҡайҙан, ҡырыҫ ҡаяташтары, ҡара урманы менән ҡалҡып-ҡабарып, олпат, мөһабәт бер тау ята.

— Көркәк тауы, — тип аңлата Нәжиә апай. — Был тау тураһында атай-олатайҙарҙың хикмәтле һүҙе лә бар: ”Көркәк тауын ҡуҙғатырға ярамай. Ҡуҙғатһаң, тирә-яҡты һыу баҫыр, һыу баҫмаһа, ут сығыр”, — тип һөйләгәндәр.

Бына нисек?! Тимәк, тауҙы ҡуҙғатырға ярамай, тип киҫәткәндәр боронғолар! Ә бөгөн, беҙҙең заманда, ниҙәр эшләнә һуң Көркәк тауы тирәһендә? Ни ҡылынғаны инде мәғлүм: Көркәк янында, гүзәл тәбиғәтте мәсхәрәләп, ағас-ташты иҙеп-имгәтеп, бик ҙур карьер асып яталар. Абҙаҡҡа яҡыныраҡ ятҡан вағыраҡ тауҙарҙы ҡутарып, Белореттан һалына башлаған яңы юлға түшәргә таш алалар. Киләсәктә тимер юл полотноһы ла икенсе урындан — хәҙергеһенән өҫтәрәк үтәсәк. Тимәк, йәнә тау-таш аҡтарыласаҡ әле. Бындағы тамырҙары менән күккә ҡарап ятҡан, түңкәрелеп ташланған ҙур-ҙур ағастарҙы күрһәң, сәстәрең үрә торорлоҡ.

Тыуған төйәк ни тиклем аяуһыҙ тәләфләнә! Юғарынан әмер алған түрәләр, боронғоларҙың киҫәтеүен һанламай, ауыл халҡының ризаһыҙлығын аяҡ аҫтына һалып тапап, тәбиғәт ҡомартҡыһы — тауҙарҙы ватып-емерәләр бөгөн. Мәғлүм булыуынса, Абҙаҡ карьерынан, йәғни Көркәк тауынан, бик ҡаты тоҡом ҡырсынташ алыу планлаштырыла. Белгестәр әйтеүенсә, ул таш АЭС-тар төҙөүгә, ә үҙебеҙҙә... юлдарға түшәүгә (?) файҙаланыласаҡ. Ул, бәлки, элегерәк шулай ҙа булыр ине. Ләкин бөгөн иһә хәл үҙгәрә: атом электр станциялары төҙөү ил күләмендә кәметелә, йә бөтөнләй туҡтатыла. Ниңә, улайһа, тәбиғәтебеҙгә төҙәлмәҫлек яра һалып, тыуған төйәгебеҙгә оло зыян килтереп, ул ташты сығарырға? Ерҙең аҫтын-өҫтөн аҡтарып, юлдарыбыҙға шундай юғары ҡатылыҡтағы ҡырсынташ түшәү — юлға алтын ялатыуға бәрәбәр булмаҫмы? Был беҙгә бик тә ҡиммәткә төшә түгелме?

Унан һуң, оло карьер асыуҙан күреләсәк һәләкәтте кем күҙ алдына килтерә ала? Урындағы халыҡты, хатта тирә-яҡ тәбиғәтте, йәшәр мөхитебеҙҙе яҡынан ҙур хәүеф һағалай түгелме? Көркәкте ҡуҙғатырға ярамай, тип боронғо атай-олатайҙар белмәй әйтмәгәндәрҙер...

***

Абҙаҡтан киткәндә мине Сабирйән ағай оло юлғаса оҙата барҙы. Сабирйән ағай — ер-һыу атамалары, халыҡ тарихы буйынса киң мәғлүмәтле кеше. Ауылдаштары кеүек үк, тыуған төйәк, ауыл яҙмышы өсөн нык борсола. Икенсе класта уҡыған ейәне Русланға киләсәктә Көркәк тауынан берәй матурлыҡ ҡалырына ышанысы бик тә бәләкәй ауыл ҡартының.

Ауылдан дүрт-биш саҡырымда ятҡан Абҙаҡ станцияһына ҡарай атлайым. Алда, офоҡта, Көркәк тауы күгәреп күренә. Ул әле тыныс, тирә-яғында һиллек. Тау битләүҙәрендә мал көтөүҙәре йөрөй. Донъя, бар тәбиғәт бына-бына гөлт итеп наҙлы, саф йәшеллеккә төрөнөргә генә тора. Ошо хозурлыҡҡа ҡапма-ҡаршы уйҙар быраулай мейене: "Ниңә ошондай матурлыҡты юҡҡа сығарырға? Үҙ еренә халыҡ үҙе хужа түгелме ни?.."

Ҡапыл, әллә ҡайҙан алыҫ-алыҫтан, Көркәк тауы, Ҡырҡты ҡаялары үңеренән һағышлы ҡурай тауышы ишетелгәндәй була. Әллә был Ҡыҙыл буйҙарын яңғыратып, мин эҙҙәрен юллап йөрөгән оҙон башҡорт көйөн һыҙҙырыусы данлы ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаевтың үҙеме тағы?..

Ошо ҡурайға ҡушылып, Сәйҙә инәйҙең (миңә быға са бер тапҡыр ҙа ишетергә тура килмәгән) хәүеф тулы йыры яңғырай:

*Ай, Уралым да ғына, ай, Уралым,*
*Уралыма барып урайым.*
*Быйыл ғына, Урал, минеке инең,*
*Киләһе йыл кемгә булырһың?..*

Һикһәненсе йәше менән барған ил инәһе — Сәйҙә әбейҙең был йыры — гүйә Абҙаҡтың беҙгә әйтер һуңғы йөрәк һүҙе. Абҙаҡтың был аҙаҡҡы йыры — үткән быуындарҙың беҙгә аманаты, ҡаты шелтәһеме әллә? Бәлки, уяныр ға саҡырып, аҙаҡҡы иҫкәртеүелер.

Мәшһүр ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаевтың эҙҙәрен юллап башлаған сәйәхәтемдең башы ғына әле был. Әммә ул күпме яҡты күңелле кешеләр менән осраштырҙы, күпме яҙмыштар менән таныштырҙы, йөрәктәрҙе тетрәтерлек, һоҡланғыс йырҙары менән ил, ер тарихына ла, халҡыбыҙҙың бөгөнгөһөнә лә алып инеп китте. Ер һәм тел яҙмышы — ул халҡым яҙмышына уртаҡ: аяныс та, хәүефле лә. Һаҡлауға һәм яҡлауға мохтаж яҙмыштар.